# Яныбаевская сельская библиотека представляет буктрейлер по журналу «Аманат»

100 БАШКОРТОСТАН 1919–2019

## Открытый городской конкурс буктрейлеров «Живые страницы Башкортостана» посвященного 100- летию образования Республики Башкортостан

# «Аманат»

*Башҡортостан Республикаһының балалар һәм үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән айлыҡ журнал.*






**Тыуған көнөңдә**
**билдәләп**
**Тантана итә халыҡ.**
**Бай тарихлы ғүмереңдә**
**Тупланһын ижади**
**байлыҡ.**
**Аҡ һаҡаллы «Аманат»**
**ым,**
**Тиңдәш беҙгә бөгөн дә.**
**Изге теләктәр теләйем**
**Һиңә тыуған көндә!**

1929 йылдың мартынан Башҡортостан пионерҙар ойошмаһының һәм РКСМ өлкә комитетының органы булараҡ «Керпе» исеме менән нәшер ителә башлай.

**Ойоштороусыһы һәм беренсе мөхәррире Мәхәмәтйәров Хәй**






# 1931 йылдың ғинуарынан баҫма «Пионер» исеме менән донъя күрә. Етәксеһе башҡорт яҙыусыһы Зәйнәп Биишева






# Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында журналды сығарыу туҡтатыла һәм 1952 йылдың сентябренән яңынан нәшер ителә башлай.






# 1991 йылдың апреленән журнал «Аманат» тип атала. 2006 йылдан алып баш мөхәррире булып Сәлмән Шәкирйән улы Ярмуллин етәкләй






АМАНАТ 2017 Ғинуар
6+
АМАНАТ 2018 Апрель
2018 Ғаилә йылы Год семьи
Йософ менән Мәрйәм
(Мәктәптә якшы укыуҙан тыш, мәсеттә һабак алып, ғәрәп телен өйрәнгән, күп доғаларҙы яттан белгән, хатта намаҙ менән ураҙаһын да калдырмаған был тиҫтерҙәрегеҙ хакында "Һабак" рубрикаһында укығыҙ).
ПИОНЕР 9
1982
АМАНАТ 2010 Апрель
ПИОНЕР 5
1986

# Тиҫтерҙәрең ижады












# Әҫәрҙәрҙе уҡыйыҡ, әҙиптәрҙе беләйек



Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының Яҙыусылар союзы ағзаһы, Халыҡ-ара иктисад һәм хоҡуҡ институтының Башҡортостан филиалы етәксеһе, ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор, Рәсәй тәбиғи фәндәр академияһы академигы, Рәсәй юристар берлеге ағзаһы Ғарифулла Хәбибулла улы Япаров Архангель районының Әйтмәмбәт ауылында тыуа. Биш малай һәм биш ҡыҙлы ҙур ғаиләлә үҫә. Оло ағай-апайҙарынан күрмәксе, биш йәшенән "Пионер"ҙы уҡып үҫкән сос малай, бәләкәйҙән үк гилемгә, аң-белемгә ынтыла.

"Кистәрен, эштән арып ҡайтҡан атайыма "Пионер"ҙа донъя күргән хикәйәләрҙе уҡыйым, кумәкләшеп башваткыстарын сисәбеҙ. Минең аңлы бала сағым "Пионер" журналы менән бергә үтте. Уны яҙҙырмаған сағыбыҙ булмағандыр. Гел яҡшылыҡҡа, аң-белемгә өндәүсе "Пионер"ҙы мин генә түгел, һәр үҫмер яратып уҡыны," – ти ул.

Дуҫтар, һеҙҙең иғтибарға Ғарифулла Япаровтың бер шәлкем мажаралы хикәйәләрен тәҡдим итәбеҙ.

## БАЛАСАҠ ИЛЕ

Хикәйәләр

### Белем һуҡмағына юл

### Һабаҡ





Гөлдәр БУЛӘКБАЕВА-БИРГӘНОВА

## Йөрәгеңде тыңла

Повесть

Тимур ҡайтып ингәндә әсәһе һыйырҙарын һауып инеп кенә тора ине. Улының күңелһеҙләнеүен үҙенсә юрап:

– И-и-и, арыныңмы инде. Кәтүгә сыкмаҫҡа ла булғандыр ҙа... Бар, мунса әҙер, – тип хәләнән килгәнсә хәстәрлек күрһәтергә тырышты.



Урал Мөләков

Оҙаҡ йылдар ауыр һәм яуаплы эштә – Башҡортостан Юғары Судында судья булып эшләгән, хәҙер отставкалағы судья Урал Абдулла улы Мөләков хикәйәләр яҙыу менән мауыға. Башҡортостан һәм Рәсәй матбуғатының әүҙем авторы ла. Уның бик күп хикәйәләре "Юлбарыҫ исемле ат" китабында донъя күргән. Был һанда уның мажаралы хикәйәләрен "Аманат" уҡыусыларына ла тәҡдим итәбеҙ.

## ЙӘШӘЙЕШ ТЕМАЛАРЫ

(Уймаҡ хикәйәләр)

### Испанса ит

### Таныш булмаған емеш

# «Аманат» журналы йондоҙлоғо









# Башҡортостан ҡоштары





## ҠАРАСАБАН, ҠАРА ӨЙРӘК (ТУРПАН)





## КЕСЕРТКӘН ТУРҒАЙЫ

Грек телендә был ҡоштоң боронғо исеме **троглодит**, йәғни тура мәғәнәһендә мәмерйәлә йәшәүсе тип атала. Ысынлап та, был бик бәләкәй генә турғайҙың ояһын таба алһаң, ул мәмерйәне хәтерләтә. Өҫкә күтәрелеп торған ҡыҫҡа ҡойроғо, бәләкәй башы һәм ҡыҫҡа муйынының бөтөнләй шәйләнмәүе арҡаһында был ҡошсоҡ кескәй генә йомшаҡ шарҙы хәтерләтә. Ябай һоро турғайҙан ике тапҡырға тиерлек бәләкәсерәк һәм еңелерәк был ҡош 12 грамм ғына тарта. Уның ҡарауы, тауышы бик сағыу, шундай кескәй йән эйәһендә шул тиклем сырылдау нисек ярала икән, тип аптырап ҡалырлыҡ. Кесерткән турғайының тауышы үҙҙәренән өсләтә ҙурыраҡ булған һабантурғайҙыҡынан да көслөрәк!

Кесерткән турғайы **(крапивница)** дымлы ылыҫлы урмандарҙа, ҡуйы бейек үлән ҡаплаған урындарҙа көн итә. Бейеккә осмай, ерҙән юрғалауға өҫтөнлөк бирә. Һыуға яҡыныраҡ ерҙәрҙе төйәкләй. Иртә яҙҙа, әле һыҡар иреп бөтмәҫ борон йылы яҡтан ҡайтып етә.

Башҡа төр ҡоштарҙан айырмалы, кесерткән турғайының атаһы бер юлы бер нисә урында оя ҡора башлай. Уларҙың һаны тиҫтәгә етеүе ихтимал. Оя ерҙән бейектә түгел, йәки йығылған ағас ҡыуышында уҡ шар рәүешендә яһала. Әммә ояларҙың күпселеге эшләнеп бөтмәй, инә ҡош берәйһен һайлап алыу менән, ҡалғандарында эш туҡтай. Кесерткән турғайҙарына полигамия күренеше хас, йәғни бер атаға бер нисә инә ҡош тура килә.

Ояға һалынған 5–7 төртөклө йомортҡанан ике аҙнала шәп-шәрә балалары моронлап сыға һәм ике аҙна эсендә үк ояларын ташлап та сығалар. Хатта шундай ҡыҙыҡ факт та теркәлгән: ата-инәләре икенсе тапҡыр бала сығарғанда тәүге оя себештәре уларға икенсе партияны үҫтерешергә ярҙам итә, имеш!

Бик йыш уларҙың ояларына кәкүк йомортҡаһын һалып китә һәм ҡоштар пары үҙ себештәре урынына улар менән сағыштырғанда әзмәүерҙәй ҡош балаһын ҡарап үҫтерә.

Һыу буйҙарын төйәк итергә әүәҫ кесерткән турғайы үҙе яратҡан бөжәктәрҙән тыш яр ситендә тапҡан һыу бөжәктәрен дә бик яратып ашай. Үлән орлоҡтарына улар башҡа төрлө ризыҡ ҡалмағанда ғына ҡүсә. Тауышының сағыулығы һәм йыл буйына йырлап тороуы арҡаһында ата ҡоштарҙы ситлектә лә аҫрайҙар.

Бик сос һәм йылғыр был ҡошсоҡтар тәбиғи шарттарҙа дүрт йыл йәшәйҙәр.







## ТӨН КҮГӘРСЕНЕ

Ауыҙ тултырып күгәрсен тип атаһалар ҙа, төн күгәрсененең (козодой) ябай күгәрсендәргә бер ҡатнашлығы ла юҡ. Төн ҡошо булараҡ, барҡылдаҡтан ҙурыраҡ был турғайҙың ҡиәфәте шундайҙарға тартым: йөнө йомшаҡ һәм ҡабарынҡы, һорғолт төҫтә, осошо еңел һәм етеҙ, ауыҙы һәм күҙҙәре ҙур. Йыраҡтан ҡарағанда, ул кәкүкте лә хәтерләтеп ҡуя. Ә уның тауышын бер нәмәнеке менән дә бутарлыҡ түгел: төндә йә кистәрен яҡын тирәлә трактор тырылдаған кеүек тауыш ишетһәгеҙ, ул тап төн күгәрсене булыр. Ул "трактор", өҫтәүенә, тонсоҡҡан һымаҡ һыҙғырыбыраҡ һүнеп тә ҡуйыр.

Аяҡтары ҡыҫҡа, шуға был ҡошсоҡ ерҙә йөрөргә яратмай, күпселектә ботаҡта ултыра йә осоп йөрөй. Йәшерен йәшәү рәүеше алып барғанлыҡтан, был ҡошто күреүҙән бигерәк, тауышын ишетеү мөмкин. Асыҡ урындарҙа йәшәй. Уға тирә-яҡты күҙәтеп, хәүеф-хафаны абайлап ултырыу яйлыраҡ. Ояны ла ерҙә, асыҡ ерҙә ҡора. Быны оя тип тә әйтеүе ҡыйын, тигеҙ урында берәй ҡыуаҡ, йә яҫыраҡ япраҡ төбө булыуы ихтимал. Инә ҡош унда күренмәй генә боҫоп ултыра, хәүеф ныҡ янағанда ғына осоп сыға.

Ояһында ике йомортҡа була, унан 18 көндән сыҡҡан балаларын тағы ике аҙна төндәрен ашатып үҫтерәләр.

Төн бөжәктәрен был ҡоштар ярғанаттар һымаҡ йыя, бер килгәненедә бөрләтәүендә 150 себен-серәкәй-күбәләк булыуы ихтимал.

Төндәрен һунар иткәс, ҡоштар көндөҙ йәшеренеп ял итә.

Үҙенең русса исемен төн күгәрсене ҙур ауыҙлы булғаны өсөн һәм кистәрен мал көтөүе янында йөрөргә яратыуы өсөн алған. Мал янына уларҙы, әлбиттә, себен-күгәүендең күп булыуы килтерә. Бар донъя буйлап таралған был ҡоштарҙың 60-тан ашыу төрө бар, улар ҡышларға Африкаға оса, ә йылыраҡ яҡтарҙа йәшәүселәр бер урында йәшәй.

# Мәңгелек сер



## “АМАНАТ”ҠА – 90, ӘҒАИЛӘБЕҘГӘ – 10 ЙЫЛ!

**Булаҫаҡ ирем менән хат аша таныштыҡ. Дәрәсәргә әлегә лә баяғы “Аманат” журналы таныштырҙы беҙҙе.**



## “Пионер”ҙан – мөхәббәт! “Аманат”тан – аман ат*

Аманбайҙың ғаи…
Зөбәржәт Я'КУПОВА

*Аман ат – яҡлаулы исем мәғән…



## МӨХӘББӘТ – УЛ ХИМИЯ?!

З. УРАЛОВА әҙерләне.

# Беҙ сәләмәт тормош яҡлы












# Ял итәйек бергәләп




**Горизонталь буйынса:** 4. Журналдың баш мөхәррире (1991–1996). 9. Файләсуфтың фәнни хеҙмәте. 10. Каркаслы юбка. 11. Билдәле бер артист файҙаһына ҡуйылған спектакль. 13. Журналдың баш мөхәррире (1977–1986). 15. Журналдың баш мөхәррире (2006). 19. Журналдың баш мөхәррире (1996–2002). 23. Ер аҫтында алтын ҡаҙыҡ. 24. "Күл (...)һыҙ булмай, күңел һағышһыҙ булмай". 25. Йәйге еңел эшләпә. 27. Аңлатма, комментарий. 28. Бокс майҙаны. 29. Себер боланы. 30. Ғәскәрҙең Ҡыҙыл майҙан буйлап тантаналы үтеүе. 32. Намыҫ хисе. 36. Йәйрәп ятҡан киң дала. 37. Журналдың баш мөхәррире (1962–1964). 38. Тәмләткес үлән. 40. Килешмәгән, тәртипкә, әҙәпкә һыймаған яҙыҡ эш-ҡылыҡ. 41. Ижади бурлыҡ. 44. Урман эсендәге асыҡ ер. 45. Бизон, йәки зубр "егете". 46. Журналдың баш мөхәррире (1986–1988). 48. Нимәгәләр, гәзиттә, хас булған билдә. 50. Гарри Поттерҙың әҙәби әсәһе. 51. Журналдың баш мөхәррире (1988–1991). 53. Әсе тәмле, ҡырҡыу еҫле, аҡһыл-йәшел тетмәкәй япраҡлы әре ҡый үләне. 54. Йөнтәҫ емеш. 55. Парламент ағзаһы. 57. Клерктың эш урыны. 58. Европалағы баш ҡала. 59. Ҡиммәтле,

**Вертикаль буйынса:** 1. Пьеро менән Коломбино өсөн ярышҡан персонаж. 2. Ҡала эсендәге бәләкәй дөйөм баҡса. 3. Африкалағы дәүләткә исемен биргән сүллек. 5. Йәш баланы урай торған сепрәк. 6. Һаҙ мүге. 7. Хоҙай, Тәңре. 8. Вальстың баш ҡалаһы. 12. Кәтүктең икенсе атамаһы. 14. Һуған "ысығы". 15. Бөтөн нәмәнең бәләкәй бер өлөшө, ҡыйырсығы, ҡыйығы. 16. Халыҡ холҡо. 17. Генерал салбарындағы киң таҫма. 18. Австралиялағы ҡырағай эт. 19. Һарғылт ҡыҙыл төҫтәге әскелтем емешле ағас. 20. Нимәнелер эшләү, башҡарыу юлы. 21. Консул менән атташе өсөн етәксе. 22. Билдәле бер ваҡытта уҡыла торған ҡыҫҡа ғына доға. 26. Ҡан баҫымын төшерә торған популяр дарыу. 27. Үтәлеше мотлаҡ шарт. 29. Ҡаланың бер мәсеткә ҡараған өлөшө. 31. Журналдың баш мөхәррире (2002–2006). 33. Журналдың баш мөхәррире (1952–1962). 34. АҠШ-та марихуананан ҡала икенсе урында торған наркотик. 35. Үҙ исемен белгән ҡош. 37. "Елле" тәмләкәс. 39. Баҡсала үҫкән салат төрө. 42. Яратҡан Инцитат тигән атын сенатор иткән Рим императоры. 43. Судта яҡлаусы юрист. 47. Ҡағыҙ аҡсаның тышына яҙылған хаҡы. 49. Һөткә туҡып ҡурылған йомортҡа. 52. Фолиант нимә ул? 56. Һуҡыр




**Горизонталь буйынса:** 4. Кебләә ашарға яратҡан файҙалы ҡуңыҙ. 7. "Шевроле"гә исемен биргән антилопа. 8. Сағараҡлы торлаҡ. 9. Өңөн таҙалыҡта тотҡан йәнлек. 11. Ҡытайҙа махсус статусы булған айырым территория; Португалияның элекке колонияһы. 14. Хәрби караптарҙың ҙур төркөмө. 18. Юлий Цезарь менән Марк Антонийҙы белгән Мысырҙың данлыҡлы мәликәһе (батшабикәһе). 21. Эре һағыҙаҡ. 22. Ҡылға аҫылына,/ Тимергә таяна./Үлтыртып саба/Теләһәң ҡайҙа. 23. Ер аҫтындағы лабиринт. 24. Тын юлы шешеп, танау тоноп, сөскөрткән ауырыу. 25. Ат ялын "үрергә" яратҡан йәнлек. 26. Тик Рәсәйҙә һәм Японияла ғына таралған затлы тиреле йәнлек. 28. Самауыр батмусы. 30. Саҡҡас, ҡаяуы ҡалмай торған бөжәк; ояһын ҡыйыҡ аҫтына ҡорорға ярата. 31. Шыршыға оҡшатып түшәлгән иҙән. 32. Мысыр кәшәнәһе; пирамида. 33. Ҡурғаштан ҡойоп, уҫҡа кейә торған йөҙроҡ ҡоралы. 34. Ҡыш (...) шаулаһа, йылы көндәр көт.

**Вертикаль буйынса:** 1. Ҡулламаның икенсе атамаһы. 2. Олимпиада менән универсиаданың төп "геройы". 3. Үңәстең өҫкө өлөшө. 5. Скиф ҡылысы. 6. Арҡаһында йөҙә алған затлы тиреле йәнлек. 10. Ҡорманға оҡшаған йылға балығы. 12. "Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә (...) бул". 13. Беҙҙең яҡтың хуш еҫле лианаһы. 15. Тиренән, күндән тегелгән юл тоҡсайы. 16. Иң юғары сифатлы үткер ҡорос. 17. Низағ, талаш. 19. АҠШ-тың был штатында закон биш минуттан артыҡ үбешеүҙе, ир-егеттәргә ҡалала ҡатын-ҡыҙға күҙ ҡыҫыуҙы тыя. 20. Өтөрҙәрҙән торған башватҡыс. 24. Тау киртләсе, һикәлтәһе. 27. Тейеңдәргә һунар итергә яратҡан йыртҡыс йәнлек. 28. Халыҡ алдында башҡарылған ҡыҙыҡлы уйын. 29. Бразилия флагындағы яҡты йондоҙ. 30. Быуындарҙы тоташтырып торған һары төҫтәге ныҡ туҡыма.

Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.



# «Мин донъяны һүрәтләйем»













# Фотоконкурс:
# «Күҙ менән ҡаш араһы»












**Ҙур ғаләмгә киң ишеген,**
**Асты миңә «Аманат»**
**Һин дә, дуҫым, әйҙә, яҙыл**
**«Аманат»ҡа итмә хыянат!**



## Ура-а-а!!! “Аманат”ҡа 2020 йылға яҙылыу һәм “Яҙыл да бүләк от!” уйыны башланды!!!

“Аманат”ҡа яҙылыу бер ваҡытта ла һуң түгел! Ағымдағы айҙың 20-һенә тиклем яҙылһағыҙ, журнал киләһе айҙан килә лә башлаясаҡ! Мәҫәлән, 20 октябргә тиклем яҙылдығыҙ икән, тимәк, журнал ноябрь айынан килә тигән һүҙ!

Әйткәндәй, сираттағы “Яҙыл да бүләк от!” уйынын сентябрҙән башланыҡ. Унда ҡатнашырға, бүләк оторға теләһәгеҙ, 2020 йылдың 1-се яртыһына, ә иң яҡшыһы – бер йылға тотошлай яҙылып, ошо күрше биттәге һәм журналдың “Бәйләнештә”ге төркөмөндә йәки рәсми сайтында ҡуйылған купонды ҡырҡып йәки баҫтырып алып, тултырып, баҫмабыҙға яҙылыу тураһындағы почта квитанцияның (абонементының) күсермәһенен редакцияға ебәрегеҙ!

Шул купондарҙы беҙ, Яңы йыл байрамынан һуң, подписка тамамланғас, лототрон рәүешендә уйынасаҡбыҙ һәм бәхетлеләрҙең ҡайһыныһына ниндәй бүләктәр тәтейәсәген билдәләйәсәкбеҙ.

**Икенсе ярты йыллыҡҡа яҙылыу хаҡы – 350 һум 28 тин. Индексы – П2706.**

**Ғәҙәттә, ярты йыллыҡҡа яҙылыусы икенсеһенә яҙылырға онота ла ҡуя. Шуға күрә, бер юлы тулы бер йылға яҙылып ҡуйыу отошлораҡ та, арзаныраҡ та булыр – хаҡы 629 һум 04 тин була (ә ярты йыллыҡтарға айырым-айырым яҙылғанда 700 һум 56 тин булыр ине).**

**Тулы йылға яҙылыу индексы –П3396.**

Шулай уҡ почтаға барып яҙылырға йыбанғандар интернет аша ла ошо адрес буйынса яҙыла ала: ***podpiska.pochta.ru/press/П2706***.

Шулай уҡ ***rbsmi.ru*** сайты аша журналдың электрон вариантына ла яҙылып була.

Ҡиммәтле бүләктәр: **велосипед, планшет, смартфон һәм “Аманат”тың стена** сәғәттәре һеҙҙе көтә!

**Шулай уҡ “Бөтөн синыф менән – “Аманат”ҡа!”, “Бөтөн мәктәп менән – “Аманат”ҡа!” конкурстары ла уҡыу йылы менән бергә старт алды.**

*Шарттары элеккесә: бөтөн уҡыусылары ла яҙылған мәктәпкә “Аманат”тың стена сәғәте тапшырыласаҡ һәм ул мәктәп хаҡында журналда мәҡәлә баҫыласаҡ. Синыфка етәксеһенең исеме яҙылған Мактау билдәһе, ә етәксенең үҙенә “Аманат”тың Рәхмәт кәлимәһе ебәреләсәк. Әйткәндәй, улар уҡытыусыларға категорияларын күтәреүгә бик ныҡ ярҙам итә.*

# АМАНАТ

## журналының адресы




**Башҡортостан Республикаһы,**

**Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2**

**450001.**

Иғтибарығыҙ өсөн ҙур рәхмәт!